12+

ISSN 1683-3554
2'2019

Ватандаш

СООТЕЧЕСТВЕННИК ✻ COMPATRIOT

Э. Дилмөхәмәтов фотоһы.

№ 2, 2019

Ватандаш

СООТЕЧЕСТВЕННИК * COMPATRIOT

Ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис айлыҡ журнал
Общественно-политический, научно-популярный и художественный ежемесячный журнал
Monthly Socio-Political, Scientific and Literary Journal

Выходит с 1996 года

Ойоштороусыһы — Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы

Учредитель — Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан

The founder — the Agency for Press and Mass Media of the Republic of Bashkortostan

Журнал «Ватандаш» входит в научную электронную библиотеку РИНЦ и размещается на портале elibrary.ru

ЙӨКМӘТКЕҺЕ
СОДЕРЖАНИЕ

МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ТЫУЫУЫНА – 100 ЙЫЛ * К 100-ЛЕТИЮ МУСТАЯ КАРИМА

Магадеева Р. Мустай Карим — военный корреспондент 3

ТАРИХ * ИСТОРИЯ

Асфандияров А. Первый уфимец 8
Ишбулатов Ф. Затмение Луны 13
Ергин Ю. Уфимский период работы профессора В.И.Филоненко 22

ФӘН ҺӘМ ҒАЛИМДАР * НАУКА И УЧЕНЫЕ

Лотфуллина С. “Тәрән аҡыл һәм тормош тәжрибәһе философ кимәленә күтәрә”. (**Лутфуллина С.** Глубокий ум и жизненный опыт делают философом) 40

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘР * ВЫДАЮЩИЕСЯ ЛИЧНОСТИ

Галина Г. Башҡортостаныбыҙҙың аҫыл шоңҡары. (**Галина Г.** Славный сын Башкортостана) 48

2019 – ТЕАТР ЙЫЛЫ * 2019 – ГОД ТЕАТРА

Сагитова А. Мировоззренческие истоки башкирского театра 57
Bashkir Theatre: Ideological origins 67
Бүләкова Г. Күңелдәргә уйылған ролдәр. (**Булякова Г.** Незабываемые роли) 69

МӘҘӘНИӘТ ҺӘМ СӘНҒӘТ * КУЛЬТУРА И ИСКУССТВО

Ғәниева Г. Башҡорт музыкаһын үҫтереүҙә Мәсғүт Бәшировтың роле. (**Ганиева Г.** О роли Масгута Баширова в развитии башкирской музыки) 73

ПЕДАГОГИКА ҺӘМ ТӘРБИӘ * ПЕДАГОГИКА И ВОСПИТАНИЕ

Батыршин Ш. О воспитании нового поколения в вузах и школах 78

РАЙОНДАР ҺӘМ ҠАЛАЛАР * РАЙОНЫ И ГОРОДА

Рафиҡова Н. “Олатайҙар беҙгә мираҫ иткән / Ҡандар, йәндәр, иман берлеген” (**Рафикова Н.** «Единство душ, родов и веры завещали нам деды») 81

ӘҘӘБИӘТ * ЛИТЕРАТУРА

Ильясов С. Ҡағанат вариҫтары (*тарихи роман, журнал варианты*) (**Ильясов С.** Наследники каганата (*исторический роман, журнальный вариант*) 87
Орехов Б. Нейрошағир (**Орехов Б.** Нейропоэт) 136

РУХИ МИРАҪ * ДУХОВНОЕ НАСЛЕДИЕ

Ҡунафин Г. Башҡорт мәғрифәтселегенә юл башлаусы. (**Кунафин Г.** Основоположник башкирского просветительства) 140
Котов В. Почитание горы Торатау у башкир 151

КӘСЕП ҺӘМ ЭШҠЫУАРЛЫҠ * РЕМЕСЛА И ПРЕДПРИНИМАТЕЛЬСТВО

Рафикова Н. Встреча с музой – к хорошим переменам 163

ПУБЛИЦИСТИКА

Хакимов Р. Тайна смерти Булата Имашева 168

ХАЛЫҠ ИЖАДЫ * ФОЛЬКЛОР

Юлдыбаева Г. Стәрлебаш районы башҡорттарының ауыҙ-тел ижадына күҙәтеү. (**Юлдыбаева Г.** Обзор народного творчества башкир Стерлибашевского района) 173

ХӘТИРӘЛӘР * ВОСПОМИНАНИЯ

Усманова Ф. Ғүмер – иртәнге төш. (**Усманова Ф.** Жизнь как сон) 181

“ВАТАНДАШ” ПОЧТАҺЫ * ПОЧТА “ВАТАНДАША”

Инзер – хранитель памяти народной 202

«Аҡ-ҡара» фотоконкурсы. (Фотоконкурс «Черно-белое») 205

РЕЗЮМЕ 207

БЕҘҘЕҢ МӘҒЛҮМӘТ ПАРТНЕРҘАРЫБЫҘ * НАШИ ИНФОРМАЦИОННЫЕ ПАРТНЕРЫ

Борис ОРЕХОВ

Нейрошағир

Компьютер шиғриәте, йәғни компьютер тарафынан яҙылған шиғырҙар күптән, бәлки хатта компьютер барлыҡҡа килгәне бирле йәшәп килә. Тәүге электрон иҫәпләү машиналары үткән быуаттың 40-сы йылдарында, улар ярҙамында яҙылған шиғриәт 50-се йылдарҙа үк хасил булған.

Шунан бирле кибернетик шиғырҙарҙы ижад итеү технологияһы үҙгәрмәгән, тип уйлау дөрөҫлөккә тап килмәҫ ине. Төрлө дәүер әҙиптәренең шиғри тексттары бер-береһенә оҡшамағандай, 50 йыл элек шиғыр яҙған программалар хәҙергеләрҙән бик ныҡ айырыла.

Һуңғы тиҫтә йылдарҙа компьютерҙар арзанайыу һәм кесерәйеү юлын үткән, шунлыҡтан уларҙың иҫәпләү ҡеүәттәрен файҙаланыу мөмкинлеге лә артҡан. Теләгән бер формулировкала алынған Мур законы электрон иҫәп-хисап машиналарына һәр ерҙә таралыу форсатын биргән: башта улар һәр йортҡа ингән, хәҙер иһә һәр кешелә тиерлек бар. Шулай киң таралыу менән бергә компьютерҙар махсус мәсьәләләрҙе лә күпкә уңышлыраҡ сисә башлаған. Бер нисә тиҫтә йыл элек компьютерға һәр ҡағиҙәне эҙмә-эҙлекле итеп аңлатыу кәрәк тип табылһа, яңы дәүер уға хәлдәрҙе үҙ аллы аңларға мөмкинселек биргән яһалма аң офоҡтарын асты. 70-се йылдар программистары күп мөһим параметрҙарҙы: ниндәй һүҙҙәр рифмалашҡанын, һүҙҙәрҙә баҫым ҡайҙа төшкәнен, һүҙҙәрҙе грамматика ҡанундарына ярашлы итеп нисек бәйләргә кәрәккәнен — компьютер хәтеренә ҡулдан индерергә тейеш булған. Нейрон селтәре тип аталған бөгөнгө технология иһә кәрәк булған бөтә нәмәне үҙе билдәләй. Уның ғәмәлгә ашыуы бөгөнгө компьютерҙарҙың ҡеүәтенә бәйле үҫеүенә нигеҙләнә.

Текстар төҙөүсе хәҙерге техологияның нигеҙендә яһалма нейрон селтәренә таянған тәрән өйрәтеү (deep learning) идеяһы ята. Нейрон селтәрҙәре компьютер тарафынан моделләштерелә һәм, тәбиғи шарттарҙа йән эйәләре нисек өйрәнһә, программаларға ла шулай сығанаҡ мәғлүмәттәренә таянып өйрәнергә форсат бирә. Программа алгоритмдары ысын нейрондарҙың хәтерен имитациялай, йәғни тирә-яҡ мөхиттән ҡайһы бер стимулдар алып эшкәртеп, алдан бирелгән һөҙөмтәгә өлгәшеүҙең иң уңайлы юлын билдәләп, шул һөҙөмтәгә яраҡлаша. Хәҙерге компьютерҙарҙа селтәрҙе тәшкил иткән шундай нейрондар ҡатмарлы мәсьәләләрҙе сискәндә һәйбәт һөҙөмтәләр бирә. Әйтәйек, тоноҡ һүрәттә нимә төшөрөлгәнен кеше күрә алмаҫҡа мөмкин, ә компьютер был бурысты еңел генә атҡарып сыға.

Кешегә оҡшатып текст яҙыр өсөн, инеш стимулдарҙың эҙмә-эҙлелеген хәтеренә һеңдерә белгән рекуррент нейрон селтәрҙәре ҡулланыла. Беҙҙең

осраҡта ундай стимулдар булып хәрефтәр тора. Нейрон селтәре сығанаҡ мәғлүмәттә бер хәреф артынан икенсеһе ниндәй ихтималлыҡ менән килә алғанын тикшерә, һуңынан, текст төҙөгәндә осраҡлы, әммә тура килеүе иң мөмкин булған хәрефте һайлай; шулай итеп, яңы эҙмә-эҙлелек ошолай дауам итә.

Атап кителгән алгоритмдар ярҙамында беҙ башҡорт телендә шиғри текстар яҙып ҡараныҡ. Сығанаҡ материал, йәғни "өйрәтеүсе һайланма" итеп XX быуатта ижад иткән 100 башҡорт шағирының әҫәрҙәре ҡулланылды. Улар Башҡорт шиғри корпусын төҙөгәндә үк цифрланды. Python теле өсөн тәғәйенләнгән tensorflow программаһы китапханаһы ярҙамында беҙ 1024 нейронлыҡ өс ҡатламлы нейрон селтәрен булдырҙыҡ, уны өйрәтер өсөн, йәғни шиғырҙарҙа хәрефтәрҙең бер-бер артлы килеүе ихтималлығын иҫәпләр өсөн, беҙҙең мәғлүмәтебеҙ аша 20 тапҡыр үткәрҙек. Нейрон селтәрҙәр терминологияһында шундай үткәреүҙәрҙе дәүер тип атайҙар. 30 Гб оператив хәтере һәм 8 ядроһы булған ҡеүәтле компьютерҙа был процесс 40 тәүлектән ашыу дауам итте.

Беҙҙең модель ирекле селтәрҙә урынлаштырылған, һәр кем уның ярҙамында башҡортса яңы шиғри текст барлыҡҡа килтерә ала. Ошо селтәр яҙған бөтә шиғырҙарҙы беҙ Нейрошағир тип исемләнгән виртуаль әҙипкә ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Әҙәбиәттә ҡалыптар үтә көслө: улар беҙҙе шиғриәттең үҙен дә (шиғыр итеп яҙылғандарға айырым бер тәрәнлек, матурлыҡ, хикмәт хас тип уйлайбыҙ), шиғыр яҙыу процесын да (борондан уҡ ул мөғжизәле бер эш йәки илһам булып күҙ алдына килтерелә), шағир шәхесен дә (йыш ҡына беҙ әҙиптәрҙе бүтәндәргә ҡарағанда икенсерәк баһалана торған кеше тип күрәбеҙ) мифҡа әйләндерергә мәжбүр итә.

Ләкин был шиғырҙарҙа кеше рухы сағылмаған тип әйтеү ҙә хата булыр. Компьютер башҡорт шағирҙарының ысын текстарынан сығып эш иткәнлектән, Нейрошағирҙың әҫәрҙәре — башҡорт лирикаһы тарихының кибернетик көҙгөһө. Хәҙерге фәлсәфә ошо хәлебеҙҙе деконструкция һәм яңынан йыйыу, тип билдәләр ине.

Француз философы Жак Деррида популярлаштырған деконструкция төшөнсәһе аң менән ҡабул итеүҙең ғәҙәти ҡалыптарынан баш тартып, объектҡа күнегелмәгән позициянан ҡарауҙы аңлата. Ул ике өлөштән ғибәрәт: беренсеһе — деструкция, аңлатыуҙың кешене иҙә торған репрессив инстанцияларын емереү, икенсеһе — реконструкция, яңы мәғәнәләрҙе асыу. Ҡыҫҡаһы, деконструкция — тикшерелә торған объектты тәнҡит аша төшөнөү. "Автоматик" башҡорт лирикаһын уҡығанда нәҡ ошо хәл килеп сыға. Беҙ шиғырҙың нимәлер аңлатҡанына, уның йөкмәткеһенә ниндәйҙер мәғәнә — хис-тойғолар менән интеллектуаль эш һөҙөмтәһен — һалған автор барлығына өйрәндек. Шиғриәтте ошолай итеп күҙ алдына килтереү йыш ҡына бик примитив, хатта яңылыш була: ул шағирға әҙәби традиция, дөрөҫ итеп яҙыу хаҡындағы фекерҙәр яһаған йоғонтоно иҫәпкә алмай. Мәҫәлән, нәҡ ошо төшөнсәләр авторҙы рифма ҡулланырға, строфаларҙы дүрт юллыҡ итеп төҙөргә мәжбүр итә, сөнки был алымдарҙы уның иң абруйлы остаздары ла файҙаланған. Ләкин шиғырҙы тик шулай ғына яҙыу мотлаҡ түгел: мәҙәниәт тарихы-

на шиғриәттең бөтөнләй рифмаһыҙ (антик грек менән Рим шиғриәте) үҫешеүе йәки башҡа строфикаға эйә булыуы (итальян классигы Дантеның “Илаһи комедияһы” тулыһынса өс юллыҡ терциналарҙан тора) билдәле. Күп осраҡта шағир үҙе уйлағанды йәки үҙе хис иткәнде түгел, абруйлы дәүерҙәштәренән өйрәнгәнде яҙа, тип иҫәпләү дөрөҫөрәк булыр ине. Автор (бәлки, аңлы рәүештә лә түгелдер) нимә тураһында яҙырға ярағанлығын һәм ярамағанлығын һәр саҡ белә лә был ҡағиҙәләрҙе йә үтәй, йә принципиаль рәүештә боҙа. Шағирҙың бер үҙләштергән йолаға ни тиклем буйһоноуында уның индивидуаллеге сағыла. Яңы дәүерҙең иң арҙаҡлы авторҙары — традицияға таянып, уның сиктәренән сыға, билдәленең һәм яңының уртаҡлығын таба алғандар.

Нейрон селтәре тыуҙырған башҡорт шиғри текстары автор фигураһынан һәм ул текстҡа һалған мәғәнәләрҙе эҙләүҙән баш тартып (деконструкция), саф традицияны күҙәтеүгә (реконструкция) форсат бирә, йәғни ошо филологик эксперимент ярҙамында беҙ, академик хеҙмәттәргә һәм дәреслектәргә ҡағылмайынса, XX быуат башҡорт шиғриәте тураһында текста тупланған һәм төҙөлгән төшөнсәне алабыҙ.

“Яңынан йыйыу” терминын деконструкцияға полемик яуап итеп хәҙерге фәлсәфә теленә социолог Бруно Латур индергән. Дөйөмләштереп алғанда, яңынан йыйыу — деконструкцияның бер төрө. Латурҙың терминологик системаһында ул бәйләнештәрҙе яңынан урынлаштырыу, төшөнөүҙе яңыртыу мәғәнәһендә ҡулланыла. Нейрошағирҙың текстары — коммуникация процесын семиотика һәм мәғлүмәт теорияһы күҙлегенән һүрәтләгән тел ғилеме классиктары күп тасуирлаған “шағир — шиғыр — уҡыусы” системаһында бәйләнештәрҙе яңыртыу ул. Телмәр акты бер нисә фактор (уларҙың иң мөһимдәре — “адресант”, “хәбәр” һәм “адресат”, шиғри коммуникацияла “шағир”, “шиғыр” һәм “уҡыусы”ға әйләнә) үҙ-ара йоғонто яһауҙан ғибәрәт булып күҙ алдына баҫа. Хәрәкәт итеүселәрҙең (социологияла улар акторҙар тип атала) барыһы ла ҡала, ә бына уларҙың мөнәсәбәте үҙгәрә. Уҡыусы автор менән уның әҫәре аша түгел, әҫәр нигеҙендә компьютер төҙөгән конструкт аша тоташа. Коммуникацияның үҙәгенә текст килеп баҫа: иғтибарлы уҡыусы шиғырҙа әҙип шәхесенең сағылыштарын түгел, шиғырҙың үҙ һыҙаттарын эҙләр. Ысынлап та, ҡәҙимге хәлдә:

> Мин шиғриәт үҙе бит ул ун сал менән
> Таң алдымда йомаҡ таратып, —

юлдарында уҡыусы “мин” һүҙе артында кешене, шиғырҙың авторын күрер ине. Ләкин был юлдарҙы нейрон селтәре тыуҙырған — ғәҙәти мәғәнәләге автор, үҙ-үҙен аңлаусы “мин” — бында юҡ. Тимәк, адресаттың ике юлы бар: ҡәҙимге модель сигендә ҡалып, “мин” тип ниндәйҙер зат әйткәнен күҙ алдына килтереү йә, үҙләштергән ҡалыптан ситләшеп, реаль автор мәғлүмәттәренең “мин”, “шиғриәт”, “менән” һүҙҙәрен үҙ эсенә алған ошо текстҡа әйләнгәнен аңлап ҡарау. Беренсе юлға баҫҡандарға беҙ, Нейрошағир тип исем ҡушып, уйҙағы автор менән диалогҡа тәүге аҙым яһарға ярҙам итәбеҙ. Икенсе юлдан барғандарға, билдәһеҙлеккә сәйәхәт итеүсе һәр кемгә кеүек, күберәк ҡыйыулыҡ кәрәк булыр.

* * *

Бар донъяны күреп башҡорт балаһына
Барып еткән башҡорт батыры.

* * *

Тауҙар аша баҫып тауҙар аша
Аҡ ҡайындар башын һалдылар.

* * *

Тауҙар аша баҫып башҡа бер йыр
Күкрәп ята беҙҙең йөрәктә.

* * *

Бер йыр булып күктә йәшәр быуын,
Тик бер таңда алыҫ ергә талпынды.

* * *

Беҙ киләбеҙ беҙҙең кешеләрҙең
Бар тарихын башҡа бер башлап.

* * *

Был донъяның тауҙарынан ашып,
Күңелдәргә бара балалар.

* * *

Тауҙар ҡанатында бар көндәрем,
Яҙмыш менән бергә барам.

* * *

Күңелемдең күкрәгендә
Барлыҡ башҡорт балаһы.

* * *

Шундай саҡта ғына ҡалды
Беҙҙең илдә аҡ нур һипкәне.

* * *

Киләсәк тип ҡайтыр ине —
Үҙемә тағы ни ҡылырым?

* * *

Егерменсе быуат, юғалтыуҙар —
Бөтә ғүмерен үткән аталар.

Орехов Борис Валерьевич — филология фәндәре кандидаты. 1982 йылда Өфөлә тыуған. Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған. 2011–2014 йылдарҙа университеттың компьютер филологияһы лабораторияһында рус һәм башҡорт телдәренең корпустарын эшләп сығарыу өҫтөндә эшләй, шиғриәт лексикаһын тикшерә. Әлеге ваҡытта Мәскәүҙәге “Юғары иҡтисад мәктәбе” Милли тикшеренеү университетының (НИУ ВШЭ) Лингвистика мәктәбе доценты. “Назиров архивы” журналының баш мөхәррире.